*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Фидан йондоҙо



*Фидан Ғафаров*

Мин үҙемде бәхетле быуын вәкиле, тип иҫәпләйем. Сөнки беҙҙең шаулы студент тормошо 80-се йылдар башына тура килде. Тап ошо осорҙа Башҡортостанда сәнғәт айырыуса сәскә атҡан мәл булып, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бар халыҡты үҙенә әйҙәп торған серле төйәк ине. Был Фидан Ғафаров, Нурия Ирсаеваларҙың илаһи ижад донъяһына һоҡланып өсөн театрға йөрөгән саҡ булды. Спектаклдәргә билеттарҙы алдан алып бөтәләр, шуға күрә беҙ, студенттар, аҡса булһа, спектакль башланыр алдынан театр ҡаршыһына барып баҫабыҙ ҙа, «артыҡ» билет һорап торабыҙ. Ошо билет ҡулға эләкһә, беҙҙән дә бәхетле кеше юҡ. Тимәк, Фиданды күрәсәкбеҙ, уның сәхнәлә уйнағанына һоҡланып, берсә ҡыуанып, берсә ҡайғырып, илап (йыш ҡына шулай ҙа була торғайны) ултырасаҡбыҙ.

...Бына тамашасылар ултырған залда әкрен генә ут һүнә. Бар тормош сәхнәгә күсә. Ә унда мөхәббәт, хыянат, осрашыу, ҡауышыу һәм айырылышыу... Унда Ғәлиәбаныу менән Хәлил моңлана. Унда Зөлкәрнәй, Заһир, Исмәғил... Йәшлектең йәшел бөрөләрен илаһи мөхәббәт тупрағына сәсергә көс, дәрт, илһам биргән образдар...

Рәсәйҙең, Башҡортостандың халыҡ артисы Фидан Ғафаровтың исеме республикабыҙҙа ғына түгел, сит өлкәләрҙә, хатта сит илдәрҙә лә киң билдәле. Һуңғы дүрт тиҫтәнән ашыу йылда ул башҡорт сәхнәһенең иң сағыу, иң популяр актерҙарының береһе булып танылды. Уның таланты ысын мәғәнәһендә халыҡсан, романтик рухлы ижадына үрелеп бара. Сәхнә оҫталығына һоҡланғыс тауышы ла ҡушылһа, тамашасыны мөкиббән ғашиҡ иткән образ тыуа. Уҙған быуаттың 70—80-се йылдарында башҡорт театры сәхнәһендә һәр саҡ аншлаг менән барған спектакль — драматург Ибраһим Абдуллиндың «Тиле йәшлеге»ндә Фидан Ғафаров башҡарған Зөлкәрнәйҙе нисек онотаһың?! Тамашасылар айырыуса яратып ҡабул иткән иң сағыу образдарҙың береһе ине ул. Эсендәге — тышында, уңған, төҫкә-башҡа матур, гармунсы, йырсы егеткә ғашиҡ булмаған ҡыҙ бармы икән?! Ғөмүмән, ул заманда күпселек ҡыҙҙар тормошта тап Зөлкәрнәй кеүек егетте эҙләгәндер, сөнки Фидан Сафа улы уны шундай ихлас итеп уйнай торғайны. Ул йылдарҙа халыҡ, айырыуса йәштәр, Башҡорт дәүләт академия драма театрына

Фидан Ғафаровтың, Нурия Ирсаеваның сәхнәлә уйнауын ҡарар өсөн йөрөй ине. (Ә улар башлыса гел парлап уйнаны).

Фидан Сафа улын халыҡтың ихлас яратыуының тағы бер дәлиле: ул йылдарҙа улдарына Фидан тип исем ҡушҡан ғаиләләр күбәйҙе. Күрәһең, киләсәктә улдарын уның кеүек талантлы итеп күргеләре килгәндер.

Лирик-драматик пландағы артист булараҡ, Фидан Ғафаров йәшәйештең мәңгелек ҡанундарын раҫланы, тормошҡа, мөхәббәткә дан йырланы. Классик һәм милли авторҙарҙың әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған төрлө жанрҙағы спектаклдәрҙә һоҡланғыс ролдәр менән ҡыуандырҙы. «Тапшырылмаған хаттар»ҙа (Ғ.Ҡотой, Р.Исрафилов инсценировкаһы) — Искәндәр, «Ғәлиәбаныу»ҙа — Хәлил, «Ғәлиә»лә (Т.Таһиров, Р.Исрафилов инсценировкаһы) Заһир ролдәре башҡорт сәхнәһенең гүзәл балҡышы булып әүерелде.

Ә инде 1981 йылда М.Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы буйынса ҡуйылған «Яҙмыштарҙан уҙмыш бар» (Р.Исрафилов инсценировкаһы) спектаклендәге Мәрәһим роле актерҙың иң ҙур уңыштарының береһе булғандыр. Был роле өсөн Фидан Ғафаровҡа республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелде. Күңеле тулы моңһағыш, көслө рухлы, зирәк зиһенле Мәрәһим актер башҡарыуында илаһи бер мөхәббәт символына әүерелде.

«Диләфрүзгә дүрт кейәү»ҙә (Т.Миңнуллин) — Исмәғил, «Ҡарағол»да (Д.Юлтый) — Һөйөндөк, «Миләүшә»лә (Н.Асанбаев) — Иншар Дияров, «Ай тотолған төндө»лә (М.Кәрим) — Ырыҫҡол, «Рәйсә+Фәйзи»ҙә (Н.Асанбаев) — Фәйзи, «Йәш йөрәктәр»ҙә (Ф.Бурнаш) Хәйретдин кеүек сағыу һәм күркәм ролдәре актерҙың ижади үҫеш бейеклектәрен тағы бер раҫланы.

Фидан Ғафаров — Дүртөйлө егете. Йәмле Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан Яңы Уртай ауылында тыуған. Атаһы Сафа менән әсәһе Рәйсә ғаиләлә өсөнсө бала булып донъяға килгән улдарына Фидан тип исем ҡуша. Бәләкәйҙән дәртле, дарманлы була ул: атаһы Сафа ағайҙан гармунда уйнарға өйрәнә, әсәһенән моңло йырҙар ота. Ағиҙел буйында ауыл йәштәре ойоштorған киске уйындарҙың уртаһында ла Фидан. «Үҫкәс, мотлаҡ гармунсы булам», тип хы-



яллана егет. Һигеҙенсе синыфты тамамлағас, ошо хыялы уны Өфө ҡалаһына, сәнғәт училищеһына алып килә лә инде. 1966 йылда диплом алған талантлы егетте М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә саҡыралар. Бына 40 йылдан ашыу инде Фидан Ғафаров ошо сәхнәнән төшкәне юҡ, ул ролдәрен, ә ролдәре уны биҙәй. Әйткәндәй, күренекле драматург Әнғәм Атнабаевтың «Мөхәббәт тураһында йыр» драмаһында Илһам образы уның академия театры сәхнәһендәге тәүге роле була. Ә 1972 йылдан алып оҙаҡ йылдар сәхнәнән төшмәгән «Тиле йәшлек»тәге (Ибраһим Абдуллин) шаян да, зирәк тә, һөйкөмлө һәм күңелсәк егет Зөлҡәрнәйҙе иһә барса халыҡ яратып ҡабул итте. Ул ғына ла түгел, тамашасы өсөн Фидан менән Зөлҡәрнәй бер бөтөн, айырылғыһыҙ ине. Сөнки актер һәр образды тәрән кисерештәр аша, һәр һүҙен йөрәге, аҡылы аша үткәреп, шуға бар булмышын — йөҙөндәге, ҡиәфәтендәге сағылыштарҙы ҡушып ижад итә. Ғөмүмән, ул сәхнәлә уйнамай — йәшәй. Ошо йәшәүе, йәне-тәне менән образға үтеп инеүе тамашасыны арбай. Ихласлыҡ, үҙе һайлаған ауыр ҙа, яуаплы ла, әммә үтә абруйлы актер һөнәренә тоғро хеҙмәт итеү өлгөһө шулай булалыр.



Фидан Ғафаров... Уҙған быуаттың 70—80-се йылдары ул театрҙа ғәжәйеп яҡты йондоҙ булып балҡыған йылдар. Уны күреү өсөн ҡыҙҙар спектаклде ике, өс, юҡ, хатта биш тапҡыр ҡарарға ла әҙерҙәр. Ул ғына ла түгел, тамаша тамамланғас та



таралышмайҙар: яратҡан кумирҙарының ҡайтырға сыҡҡанын түҙемһеҙлек менән көтәләр. Автограф алырға тырышалар, ә актер менән бергәләп фотоға төшөргә мөмкин булһа, күктең етенсе ҡатына менгәндәй булалар. Йәш ҡыҙҙар Фидан ағаларының ҡатыны Фәриҙә апайҙан көнләшеп тә ҡуя. Фәриҙә ханым үҙе лә аңлай ине быны, шуға тормош юлдашына үпкәләүҙәр менән ҡараманы. Уның йәшлек мөхәббәте, ғүмерлек мөхәббәте шундай талантлы, популяр булған өсөн ҡыуана ғына ул.



Фидандың ижадына табыныусыларҙы һанап бөтөрлөк түгел: улар араһында ябай эшсе лә, район-ҡала хакимиәте башлыҡтары, эшҡыуарҙар ҙа бихисап. Спектаклдәрҙә генә түгел, бик күп концерттар менән ауыл сәхнәләрендә, баҫыу-ырҙын табаҡтарында сығыш яһағанын ихлас көтөп алалар. Йәшлек йылдары йыр-моңға тулып, ошо байлыҡты халҡына мул өләшеп йәшәне һәм йәшәй Фидан Сафа улы. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң киң урамдары ла уның йәш саҡта йырлап уҙған моңло тауышын әле лә һаҡлаған төҫлө.



— Сәхнә — минең асылым, — ти Фидан Сафа улы. — Мин унда иркен тын алам, ихлас көләм, ярһып һыҡранам. Ғөмүмән, осраҡлы кешеләр сәхнәлә оҙаҡҡа ҡала алмай. Үҙен-үҙе аямаған, булмышын ижадҡа арнаған шәхес кенә тоғролоҡ һаҡлай уға.

Йыш ҡына унан: «Һеҙ матур йырлайһығыҙ, ниңә йырсы булып китмәнегеҙ?" — тип тә һорайҙар. Минеңсә, Фидан Сафа улының моңло тауышынан, уның гармунынан башҡа ижад иткән образдары тулы ҡанлы, ғәжәйеп һоҡланғыс булмаҫ ине. Уның спектаклдәрҙә башҡарған һәр йыры күп тә үтмәй иң популяр йырҙарҙың береһенә әүерелә. Күптәр, мәҫәлән, «Ғәлиәбаныу»ҙа Хәлилдең Ғәлиәбаныуға төбәп йырлағанын, «Тапшырылма-

ған хаттар»ҙа Искәндәрҙең Ғәлиәгә арнап йырлауын тик уның башҡарыуында ғына ҡабул итә. Ғөмүмән, Фидан алып сыҡҡан йырҙы башҡа йырсы унан уҙҙырып йырлай алмай төҫлө. Шуға ла уның йырҙары яҙылған аудиокассеталарҙы һатыуҙа табыуы ла ҡыйын.



Халыҡта «Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр» тигән әйтем бар. Фидан Сафа улының ғаиләһе хаҡында был һүҙҙәр. Бына тигән ике улы бар халыҡ артисының: береһе Азамат, икенсеһе Айбулат. Икеһе лә ғаиләлә атай һүҙен йыҡмай, уны ихтирам итеп үҫкән. Ата-әсәһен ихтирам иткән бала киләсәктә башҡаларҙы ла йәберһетмәй, кәмһетмәй, һәр кемдә шәхесте күрә белә. Оло улы Айбулат актер түгел, әммә ул да гитарала, гармунда оҫта уйнай, матур йырлай. Йырҙар ижад итә, көйөн дә, һүҙҙәрен дә үҙе яҙа. Ҡатыны Руфина менән Фидан Сафа улына Таһир исемле ейән бүләк иткәндәр. Ә бына бәләкәйҙән ата-әсәһенән ҡалмай, театрға йөрөп, атаһы уйнаған һәр спектаклде күреп үҫкән Азамат үҙен талантлы артист итеп танытты. Өфө дәүләт сәнғәт институтын (хәҙер академия) уңышлы тамамлаған егетте М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына ҡушҡуллап ҡабул иттеләр. Һәм яңылышманылар: Азамат тиҙ арала үҙен һәләтле, моңло тауышлы актер итеп танытты. «Атанан күргән — уҡ юнған, әсәнән күргән — тун бескән» тигән мәҡәл ошоно дәлилләй. Ҡатыны Алһыу Ғәлина-Ғафарова менән парлашып ижад иткән ролдәрен тамашасылар айырыуса яратып ҡабул итә. Ә атаһы менән бергә уйнаған күренештәр булһа, театр һөйөүселәр уларҙы алҡыштарға, сәскәләргә күмә. Бына шундай кеше ул Фидан Сафа улы: ысын ир-егет булараҡ бына тигән ике ул үҫтергән, йорт һалған, ә ултыртҡан ағастары һанап бөткөһөҙ, күптән мул емеш биреп үҙен дә, Фәриҙә апайҙы ла ҡыуандыралар.



Театр сәхнәһендә һоҡланғыс образдар ижад итеү менән бергә, күңел түрендә ғүмер буйы ағылған моң даръяһын да һайыҡтырмай Фидан Сафа улы. Ҡайҙа ғына йырламаһын, йыр һөйөүсе тамашасылар уны алҡыштарға, сәскәләргә күмә. Ҡабат-ҡабат һорап йырлата. Театрҙан бер аҙ бушаған арала ғына яҙҙырған аудио-, видеокассеталарын шундуҡ һатып алып бөтәләр.

Мөхәббәткә мәҙхиә булып яңғыраған «Ғәлиә менән Заһир», «Ҡышҡы романс», «Кәркәле тау» һәм башҡа бик күп йырҙар уның башҡарыуында ғына ҡабул ителә, сөнки уларға Фидан Ғафаровтың моңо, аһәңе, кисерештәре, асыштары ҡушылған.



Йылғыр йылдар бер-бер артлы үтә тора, әммә тамашасылар яраткан актерҙарының сәхнәгә сығыуын әле лә ихлас көтөп ала. Әлбиттә, бөгөн Фидан Ғафаров дүрт тиҫтә йылдан ашыу ижад багажы булған актер булараҡ, үҙ йәшенә тап килгән ролдәрҙе уйнай. Н.Птушкинаның «Алдан түләйем»ендә — Альберт Фәрхатский, М.Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала сағы»нда — Талип, «Салауат»ында — Иван Федулов, Х.Ибраһимовтың «Башмағым»ында Кәрим бай һәм башҡа образдар уның башҡарыуында халыҡсан юморға бай, ихлас булыуҙары менән йәлеп итә, актерҙың үҙенә генә хас һөйкөмлөлөгө был һыҙатты тағы ла көсәйтә.

Сентябрь айында баш ҡалабыҙ Өфөлә төрки телле халыҡтарҙың «Туғанлыҡ» IV халыҡ-ара фестивале булып уҙҙы. М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры фестивалгә ике ҙур премьера әҙерләне. Береһе халҡыбыҙҙың гүзәл ҡомартҡыһы «Урал батыр» эпосы буйынса ҡуйылған спектакль булһа (Ғ.Шафиҡовтың сәхнә варианты, режиссеры — Рөстәм Хәкимов), икенсеһе — Кен Кизи әҫәре буйынса сәхнәләштерелгән «Кәкүк ояһы» спектакле (режиссеры — Айрат Абушахманов).

Фидан Сафа улы, башҡорт халыҡ эпосы буйынса ҡуйылған спектаклдә Йәнбирҙе ролен оҫта башҡарып, тамашасыларҙы тағы бер ҡыуандырҙы. Ул ижад иткән Ил ағаһы, яугир уҙаман образы күңелдәрҙә изге хистәр уятты.



Театр — күңелдәрҙе үҙенә әйҙәп торған зәп-зәңгәр күк төҫлө. Ошо күк йөҙөндә береһенән-береһе сағыу йондоҙлоҡтар бар. Унда Арыҫлан Мөбәрәков, Зәйтүнә Бикбулатова, Рәғиҙә Янбулатова, Гөлли Мөбәрәкова һәм башҡа актерҙарҙың яҡты йондоҙҙары балҡый. Улар араһында Фидан Ғафаровтың йондоҙо ла яҡтырып тора. Ә йондоҙҙар балҡыр өсөн, яныр өсөн ҡабына.